*Гөлфирә ХӘЙРЕТДИНОВА*

## ЙӨРӘГЕМӘ ЮЛДАР ҠАМАЛҒАН

Һин ҡарама минең күҙҙәремә —
Янмай унда өмөт таңдары.
Һин тыңлама йөрәк тауышымды —
Тынған унда һөйөү моңдары.

Һин ышанма минең һүҙҙәремә —
Улар һалҡын ҡышҡы елдәрҙәй.
Һәм эҙләмә ҡайнар усаҡтарҙы —
Һүнгән осҡон ҡабат ҡабынмай.

Эҙләмә лә тәүге һуҡмаҡтарҙы —
Уларҙы бит ҡарҙар ҡаплаған.
Бурандарҙа ҡалған ҡоралайҙай,
Йөрәгемә юлдар ҡамалған.

* * *

Был көҙҙәрҙең ҡәтғи үҙ ҡануны,
Япраҡтарын ҡоя бар ағас.
Аҡ ҡайында һуңғы япраҡ яна,
Йәм ташлаған хатта ҡарағас.

Көҙгө ямғыр кеүек түгелеп тә
Күңел илай һине һағынып.

Пар ҡанатым киҫелгәндәй булды,
Тиң күреп тә һөйгәс табынып.

Аҡ ҡайынҡай, зинһар, әйтсе миңә,
Әйтсе йәшермәйсә серҙәрең.
Өйрәт мине берүк сабырлыҡҡа,
Уҙғарырға күңел көҙҙәрен.

* * *

Үс иткәндәй ҡарлы ямғыр,
Туҡталмайса тәҙрәм ҡаға.
Күңелемдә һинең һының
Ә көндәрем йылдай аға.

Ағастар яҙын баҡсала
Бергә япраҡ ярған ине.
Көҙҙәр еткәс хушлашҡандай,
Улар, гүйә: «Һау бул!» — тине.

Ҡарлы ямғыр, өмөт ҡалдыр,
Мөлдөрәмә күңелемә.
Һин киттеңме әллә өнһөҙ,
Көҙгө елдәй үҙ илеңә.